
ЙЫҺАНҒА СӘЙӘХӘТ
Мәктәпкәсә һәм кесе
йәштәге мәктәп балалары
өсөн таныш - белеү
ҡулланмаһы
Әҙерләне Гайсина Р.А.
Ниғәмәт урта мәктәбе


Был ҡулланма өйҙә ата-
әсәләргә  балалар менән
танып - белеү
эшмәкәрлеген
ойошторорға
ярҙам итәсәк

Балалар, ә һеҙ төнгө күк йөҙөн күҙәткәнегеҙ бармы? Унда нимәләр күренә?

Әлбиттә, айҙы һәм йондоҙҙарҙы күреп була. Ә күктә нисә йондоҙ бар икәнен беләһегеҙме?

Юҡ  шул, йондоҙҙарҙы һанап бөтөрөү мөмкин түгел.


Бер урында тупланып
торған йондоҙҙар
йондоҙлоҡтар
барлыҡҡа килтерә


Кешеләр борон заманда ла йондоҙҙарҙы
күҙәткән, уларҙы төрлө нәмәләргә
оҡшатып, уларға исем биргән.


Созвездие Дракона
Малая Медведица
Полярная звезда
ped-kopilka.ru
Большая Медведица


Беҙ, башҡорттар, был йондоҙлоҡто
ЕТӘГӘН ЙОНДОҘ тип атайбыҙ

- **Күк йөҙөндә иҫәпһеҙ - һанһыҙ йондоҙҙарҙан башҡа тағы нимәләр бар һуң? Ҡояш, ай, планеталар, кометалар бар. Бөтә ошо күк есемдәре беҙҙең икһеҙ - сикһеҙ космосты барлыҡҡа килтерә лә инде. Космосты башҡортса ЙЫҺАН тип әйтәбеҙ.**




Нимә ул ҠОЯШ СИСТЕМАҺЫ?


Ҡояш - беҙҙе йылытыусы ла,
яҡтыртыусы ла йондоҙ ул.
Ул беҙгә иң яҡын йондоҙ.
Беҙ унда нимә янғанын да
беләбеҙ, шулай бит.
Ҡояшта газ яна.

Ҡояш тирәләй 9 планета әйләнә. Ҡояшты һәм уның тирәләй әйләнгән планеталарҙы Ҡояш системаһы тип атайбыҙ.



Һәр планетаның үҙ юлы бар. Ул орбита тип атала.

# Әйҙәгеҙ, һәр планета менән танышып үтәйек  әле.



- Ҡояшҡа иң яҡын урынлашҡан планета

Меркурий исемле планета, шуға унда бик нык эҫе.



Икенсе булып Венера исемле планета йөрөй, унда эҫе һәм болоттар бик күп. Венераны таң йондоҙо -Зөһрә йондоҙ тип тә әйтәләр



Өсөнсө планета -
беҙ йәшәгән Ер.
Бөтә 9 планета
араһында тик
Ерҙә генә тормош
бар. Ер - беҙҙең
уртаҡ йортобоҙ. Ер
булмаһа, тормош та
булмай. Ерҙе
һаҡларға тейешбеҙ.



- Ерҙең  иптәше бар.

Ул - Ай.

Ай  һәр ваҡыт

Ер тирәләй

әйләнеп йөрөй.



- Марс - дүртенсе булып Ҡояшты өйрөлөп йөрөй. Унда вулкандар күп булған. Шуға ла унда бейек тауҙар күп.  Марсты Ҡыҙыл планета тиҙәр.



- Юпитер -

иң ҙур планета.

Ул газдан тора.

Өҫтө ҡаты

Түгел.Ҡояш

тирәләй ныҡ

шәп

әйләнә икән.

Ул - бишенсе .



- Сатурндың балдағы бар. Был балдаҡ уҡмашҡан саңдан, таштарҙан һәм боҙҙан тора. Ни өсөн боҙ икәнен аңлағанһығыҙҙыр. Сөнки был планета Ҡояштан алыҫ йөрөй. Унда бик һыуыҡ.
- Сатурн - алтынсы.



- Етенсе планета - Уран
Ул ҡояштан
бик алыҫ
урынлашҡан.
Шуға унда бик  һыуыҡ
һәм  боҙ күп.



- Нептун тағы ла алыҫыраҡ урынлашҡан. Ул һигеҙенсе Планета. Нептундың зәңгәр төҫө уны матур итә. Нептунда ел бик көслө икән.



- Туғыҙынсы планета

Плутон - иң бәләкәй планета. Шуға уны күптәр планетаға һанамай икән. Уны кәрлә планета тип һанайҙар. (Карлик)



# Бармаҡ уйыны аша планета исемдәрен нығытайыҡ

**Бер ҡояшҡа 9 бала:**
**Беренсеһе - Меркурий**
**Икенсеһе -Венера**
**Өсөнсөһө - Ер**
**Дүртенсеһе - Марс**
**Бишенсеһе -Юпитер**
**Алтынсыһы - Сатурн**
**Етенсеһе - Уран**
**Һигеҙенсе -Нептун**
**Туғыҙынсы - Плутон**
**Бөтәһе бергә -10!**




Афарин, балалар! Бына бөгөн йыһанды гиҙеп алдыҡ. Йыһан гиҙеүселәрҙе ЙЫҺАНГИР тип атайҙар. Шулай булғас, беҙ ЙЫҺАНГИР булдыҡ инде. Ә кем һуң тәүге йыһангир? Был
турала саҡ ҡына һуңыраҡ
һөйләшербеҙ.
Ә әлегә планеталарҙың
исемдәрен атап өйрәнә торайыҡ.
Һау булығыҙ, кескәйҙәр
һәм ата - әсәләр!
http://gallery.world/wallpaper/647093.html